*Приложение №2*
*к рабочей программе по башкирскому языку как государственному языку Республики Башкортостан, утв.пр.№ 102 от 30.08.2019 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево

_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

# Контрольно-измерительные материалы промежуточной аттестации и критерии оценивания

по башкирскому языку как государственному
языку Республики Башкортостан
(название курса)

| | |
|---|---|
| Уровень общего образования (начальное, основное, среднее) | основное |
| Класс | 6-9 |
| Учителя | Магданова Д.М., Фахруллина Г.А., |

2022 г.

**6 класс**

Контроль диктант
Ҡара алтын

Нефтте халыҡ ҡара алтын менән сағыштыра. Был юҡҡа ғына түгел. Нефттән төрлө нәмәләр эшләнә. Бензин, кәрәсин, мазут кеүек яғыулыҡ майҙарынан тыш, унан ер ашлау өсөн химикаттар ҙа алына. Беҙҙең күлдәк, костюм, кофта һәм ойоҡбаштарға ла нефттән алынған ептәр ҡушыла.

Ҡаланың тирә-яғында нефть вышкалары һәм газ факелдары күп. Был ҡаланы, нефть һәмКама йылғаһына арнап, Нефтекама тип атанылар. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Ҡайһы һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәр бар, төрҙәрен билдәләргә
2.Костюм һүҙенә фонетик анализ яһарға

Контроль диктант
Тыуған ил

Тыуған ил ул тыуған ерҙән башлана, тибеҙ. Башлана ғына шул әле. Ул оло тойғо булып үҫеп китһен өсөн, атай йортоноң еҫен татып, тәпәйҙәрең менән тыуған тупраҡҡа баҫып, тәбиғәттең йәмен йөрәгеңә һеңдереп, тойоп йәшәй башлап китеү шарт.

Тыуған илде һөйөү – һәр кемдең тойғоһо. Әммә шул уҡ ваҡытта Тыуған илең дә һине һөйһөн. Шунда ғына был тойғо изге тойғо буласаҡ. Тимәк, кеше илен һөйөүен эше менән аҡлап, Тыуған иленең һөйөүенә лайыҡ булһын тигән һүҙ. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Инеш һүҙле һөйләмде билдәләргә.
2.Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр яҙ.

Контроль диктант
Аҡкүл

Беҙҙең ауылдан ике генә саҡрым самаһында ялтырап ята торған Аҡкүл тигән бик ҙур күл бар ине. Күлдең киңлеге 4-5 саҡрым самаһы булғанлыҡтан, уның бер яғынан икенсе яғында булған нәмәләр күҙгә саҡ-саҡ ҡына күренәләр ине.

Май айы инеү менән, күл тирәһендә кешеләр ҡайнаша башлай.

Аҡкүл буйы йылы яҡҡа күсеп бара торған ҡыр ҡаҙҙарының туҡтап, тамаҡ туйҙырып,күңел асып китә торған урындары булып әүерелә. Функциональ грамоталылыкты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Яңғыҙлыҡ исемде тап, аҫтына һыҙ.
2.Республикабыҙҙа ниндәй күлдәрҙе беләһең, яҙырға

Контроль диктант
Муйыл

Яҙ еттеме – муйыл ағасына көн бөтә. Матур итеп сәскә атып ултырған ботаҡтарҙы кәрәкме – кәрәкмәйме һындырып, өйгә алып ҡайталар. Сәскә бер-ике көн йәшәй ҙә, хуш еҫе бөткәс, ҡыйлыҡҡа ташлана. Муйыл емештәре өлгөрһә, уға ла кара көндәр башлана. Муйыллыҡтар юҡҡа сыға. Хәҙер ауыл эргәһендә муйыл табырмын тип уйлама ла. Муйыллыҡтар ныҡлы, оҙон тамырҙары менән ярҙарҙы емерелеүҙән һаҡлай. Улар ҡороғас,

яр емерелә, һыу бысрана, һайыға. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Бер ике составлы һөйләм яҙырға.
2.Беҙҙең урмандарҙа үҫкән ағас исемдәрен яҙып сы

## 7 класс

Контроль диктант

Көршәктәр

Мин аҡҡошҡа оҡшатып эшләнгән көршәктән һоҡланыулы күҙҙәремде ала алмайым. Бына юғарыға табан бормаланып, аҡҡош муйынына барып тоташҡан йомро ҡорһағына ҡойроҡто урата терәп, туҙбаш йылан көршәктән һыу эсергә ынтылған. Уның йыланса нәфис, бормас тәне лә, айырса теле лә ҡыбырлап тора һымаҡ...

Был – көршәктең тотҡаһы; тау ҡыҙҙары уны ошо туҙбаш йыландан тотоп яурындарына күтәреп ултыртҡандар...Көршәктең эсе аҡһыл зәңгәргә буялған, ә тышы иртәнге аҡ томан баҫҡан, мең төрлө сәскәгә күмелгән туғайҙы хәтерләтә. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Ҡушма һүҙәрҙе һайлап яҙырға.
2.Аҡҡошҡа һүҙенә

Контроль диктант

Шәжәрә

Шәжәрә – ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән. Шәжәрәгә ырыуҙың ирҙәр исеме генә индерелгән һәм уларҙы иҫтә тотоу талап ителгән. Нәҫел-ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән.

Үҙеңдең шәжәрәңде белеү ғәҙәте башҡорттарҙа бик борондан һаҡланып килгән, элек 7 быуыныңды белеү ғәҙәти хәл булған. Хатта ата-бабаларын 10-12 быуынға тиклем белеүселәр бар. Халыҡ тарихын өйрәнеүҙә шәжәрәләрҙең әһәмиәте бик ҙур. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1. Ҡушма һүҙҙәргә миҫалдар табып яҙ
2. Ауыр аңлашылған һүҙҙәргә аңлатма биреү

Контроль диктант

Ағиҙел

Ағиҙел – республикабыҙҙың иң ҙур йылғаһы. Урал тауы итәгенән башланып, ул Башҡортостан аша 1400 километр самаһы ер үтә һәм бик күп йылғаларҙың һыуын үҙенә йыя. Ағиҙел буйында Белорет, Күмертау, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө ҡалалары теҙелгән. Колхоз, совхоз баҫыуҙары йәйелеп ята.

Ағиҙелдә иген, ағас, нефть һәм пассажирҙар тейәгән ҙур пароходтар,теплоходтар,баржалар, катерҙар йөрөй. Йылғаның аҡ тулҡындарына, бейек ҡаяларына, унда үҫкән ҡалын урмандарына, йәшел туғайҙарына һоҡланмаған кеше юҡ. Бына ниндәй ул йылғалар әсәһе- Ағиҙел! Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең аҫтына һыҙырға
2.Беҙ йәшәгән районның иң ҙур йылғаһының исемен яҙырға

Контроль диктант

Яҙмыш

Күпме ҡалалар, ауылдар, йорттар, өйҙәр күргән бар. Һәр бер өй – күпме яҙмыштар төйөнө. Ауыл өйҙәре үҙҙәре генә күпме ул-ҡыҙҙар үҫтереп, ҡош балалары шикелле уларҙы ҡайҙарға ғына осороп ебәрмәгән. Шунда тыуып, шунда ғүмер итеп киткәндәре күп. Һәр өйгә ҡайғыһы ла, шатлығы ла инеп сыға.

Усаҡта ут булһа, өй теремек. Тәҙрәлә яҡтылыҡ булһа, йорт күркәм. Кеше яҙмышы үҙе бер роман икән, өй яҙмышы – үҙе бер эпопея. Кешем, мин һинең хаҡта уйлайым. Әсә һөтөнән, усаҡ ҡуҙынан һинең йөрәккә күскән утта йылыныусылар барҙыр, тим. Туң күңелдәрҙе иретәһе, өшөгәндәрҙе йылытаһы ла бар бит. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.1-се һөйләмгә синтаксик анализ яһарға.
2.Эпопея һүҙенең мәғәнәһен асыҡларға

**8-се класс**

Контроль диктант

Көҙгө урман

Мин көҙгө урманда йөрөргә яратам.Унын иң гүзәл сағы сентябрь бөткәндә, октябрь баштарында булалыр. Тауҙары иренеп кенә йөҙгән зәңгәр күккә,йылы аяҙ көнгә, урмандың төрлө биҙәк хазинаһына һоҡланып туя алмайһың.Тәрән тынлыҡ. Аяҡтарыңды ергә түшәлгән алтын япраҡтар иркәләй. Ә ағастар? Ниндәйҙер оло ҡарағай йәки имән ышығында үҙенең ҡыҙыллы-һарылы сыбар кейемендә йәш саған ҡупшыланып ултыра.Тағы сыбар биҙәкле япраҡтарға һарыҡҡан асыҡ ҡыҙыл емештәре менән ҡыштырлап миләш тора. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Бер составлы һөйләмде табып яҙырға.
2.Япраҡтарға һүҙе ниндәй килештә килгән.

Контроль диктант

Көн исемдәре

Билдәле булыуынса, көн исемдәрен башҡортса дүшәмбе, шишәмбе, шаршамбы, кесаҙна, йома, шәмбе, йәкшәмбе тип атайҙар. Был һүҙҙәр нимә аңлата һуң? Бына уларҙың мәғәнәләре: йәк, дү, ши, шар ҡушымталары – бер, ике, өс, дүрт һандарының исемдәре. Ә шәмбе – “көн” тигәнде аңлата икән. Фарсылар шул һандарға шәмбе һүҙен ҡушып, аҙна көнө исемдәрен яһаған. Шулай итеп, йәкшәмбе – беренсе көн, дүшәмбе – икенсе көн, шишәмбе – өсөнсө көн, шаршамбы – дүртенсе көн. Кесаҙна һүҙенә фарсылар дини мәғәнә һалған. Уны кесе йома тип тә әйтәләр. Ул намаҙға йыйылыу көнө тигәнде аңлата. Йома һүҙе аҙна мәғәнәһен бирә. Аҙна һүҙе фарсы телендә етене белдерә.
Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1. Фарсы һүҙенең мәғәнәһен асыҡлау.
2. Бер тиң киҫәкле һөйләмдең аҫтына һыҙырға

Контроль диктант

Бал

Башҡорт балы тураһында, ғөмүмән, бал тураһында бөгөн беҙ күп нәмә беләбеҙ. Ул – борондан билдәле ҡиммәтле ризыҡ, халыҡ араһында киң ҡулланылған дауалау сараһы. Балдың файҙаһын боронғо Мысырҙа, Грецияла ла белгәндәр. Балдан башҡа бал ҡорто прополис, балауыҙ кеүек файҙалы матдәләрҙе бүләк итте кешелеккә.

Балда алтмышҡа яҡын төрлө матдә бар. Балдың бөтә сорттарында ла глюкоза менән фруктоза күп. Бал витаминдарға ла бик бай. Уны һыуҙа иретеп, шуның менән ауыҙ сайҡайҙар. Һөҙөмтәлә күп кенә микробтар юҡҡа сыға.

Бал менән ашҡаҙан ауырыуҙарын да дауалайҙар. Йоҡлай алмағанда ла , балдың файҙалы булыуы билдәле. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе һайлап яҙырға.
2.Балауыҙ һүҙенең мәғәнәһен асыҡларға

Контроль диктант

Йәштән сыныҡырға кәрәк

Һәр бала сабый саҡтан уҡ яҡшы холоҡло булып үҫергә тейеш. Ыҫпайлыҡ һәм йыйнаҡлыҡ, эшсәнлек һәм тырышлыҡ кеүек яҡшы ғәҙәттәрҙе кесе йәштән үк үҙеңдә тәрбиәләргә кәрәк. Бындай һәйбәт сифаттарға эйә булған кешене һәр кем хөрмәтләй,яҡын итә. Һәр бала ҙурҙарға ихтирамлы, бәләкәйҙәргә иғтибарлы булһын. Әҙәпле бала ололар менән һәр саҡ үҙе башлап иҫәнләшә, хәйерле иртә, тыныс йоҡо теләй.

Өйҙә лә, эштә лә ныҡлы режим булдырырға кәрәк. Режим кешене тәртипкә өйрәтә, теүәллеккә ғәҙәтләндерә. Иртәнсәк билдәле ваҡытта торорға, билдәле ваҡытта дәрес әҙерләргә, уйнарға, ашарға, файҙалы эш менән шөғөлләнергә кәрәк. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Һуңғы һөйләмгә синтаксик анализ яһарға.
2.Яһалма һүҙҙәргә миҫалдар яҙырға

**9-сы класс**

Контроль диктант

Октябрь

Октябрь – көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Әсе елдәр иҫә. Иртәнге һыуыҡтар көсәйә төшә. Күләүектәр таңғаса боҙ менән ҡапланған була. Йыш яуған һалкынса ямғырҙар арҡаһында октябрҙе халыҡта “батҡаҡ айы” тип тә атайҙар. Тәүге ҡар яуа, ләкин ул шунда уҡ ирей. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡар ятып та ҡуя.

Күлдәр, быуалар туңа башлай. Иң аҙаҡҡы күсмә ҡоштар китеп бөтә. Иң һуңғы булып сәүкәләр, өйрәктәр китә. Уларға алмашҡа ҡыҙылтүштәр, беҙҙең яҡтарҙа ҡышлаусы бүтән ҡоштар килә. Ныҡлап һыуыҡ төшөү менән, айыу, бурһыҡ, алйырҙан йоҡоға тала.

Баҡсаларҙа ағас ултыртыу дауам итә. Япраҡтар тулыһынса ҡойолоп бөтә. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Бер ҡушма һөйләмгә ситаксик анализ яһарға
2.Тағы ҡайһы ҡоштар беҙҙә ҡышлап ҡалалар

Контроль диктант

Талҡаҫ күле

Юлдаш менән Ҡыҙырас аяҡтарын күлдең йомшаҡ ҡомона батырып, оҙаҡ ултырҙылар. Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине. Иртәнге һауала тауыш көслө яңғырай. Унда, Һаҡмар буйында, трактор геүләй. Һулда комбайн шаулай. Алыҫта йәштәрҙең йырлаған, бейегән, көлгән тауыштары ишетелә. Оло юлдан иген , мәғдән тейәгән машиналар өҙлөкһөҙ үтә. Бейектә, зәңгәр күк йөҙөндә самолет күренә. Ул Өфөнән Баймаҡҡа почта килтерә.

Ә бында иҫ киткес Талҡаҫ күле. Ул әлегә тып-тын ята. Күлдең уртаһында, көкһел томан эсендә, Уртаташ күренә. Күңелле лә һуң Талкаҫ буйында ! Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1. Тағы ла ниндәй күлдәрҙе беләһегеҙ.
2. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе яҙырға

Контроль диктант

Ҡоштарҙы ашатығыҙ

Урмандарҙа, баҡсаларҙа зарарлы бөжәктәрҙе таҙартыусы ҡоштар араһында ҡарабаш турғайҙан да егәрлеһе юҡтыр.Орнитологтарҙың иҫәпләүҙәренә ҡарағанда,бала үҫтергән саҡта ҡарабаш турғайҙарҙың бер ояһы ғына ла көн һайын меңләгән ҡаршылауыҡты юҡ итә.

Ҡыш етеп, көндәр һыуына башлағас,ҡарабаш турғай урмандан кеше йәшәгән тирәгә күсә. Бында аҙыҡ табыуы еңелерәк. Ас булһа, өшөй ҙә, аҙыҡ эҙләргә хәле ҡалмай.Ҡайһы бер райондарҙа яҙ етеүгә уларҙың яртыһы ғына ҡалған була. Ә ҡыш бик һыуыҡ булһа,ундан бере генә ҡышлап сыға.

Балалар, ҡоштарға ярҙам итегеҙ! Улар-беҙҙең ярҙамсыларыбыҙ,дуҫтарыбыҙ.Уларҙы эйәләштерегеҙ,ашатығыҙ! Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Бер ҡушма һөйләмдең аҫтына һыҙырға.
2.Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар исемдәрен яҙырға.

Контроль диктант

Июнь айы

Июнь- йылдың иң матур айы. Болон , туғайҙар гөрләп сәскә ата. Был айҙа Өфө ҡалаһына яҡын аҡландарҙа ҡырҡтан ашыу сәскә төрөн күрергә мөмкин. Йылға,күлдәр өҫтөн ап-аҡ һәм һап-һары томбойоҡ сәскәләре ҡаплай.

Май, июнь-ҡоштарҙың бала сығарыу ваҡыты.Улар балаларына ашарға ташып бер була. Мәҫәлән,бәләкәй генә себен сәпсеге тәүлегенә 560 тапҡыр осоп,аҙыҡ килтерә. Июндә күбәләктәр оса. Бал ҡорто күс айыра.

Июнь-тәүге еләктәр айы. Иң тәүҙә ҡайын еләге бешә.

22 июнь-йыл эсендә иң оҙон көн һәм иң ҡыҫҡа төн. Бер нисә көн шулай тигеҙ тора, шунан йәйге көн ҡыҫҡара башлай. Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности):

1.Артыҡлыҡ дәрәжәһендә килгән сифаттарҙы яҙырға.
2.2-се һөйләмгә синтаксик анализ яһарға.